Зөлфиә Кускилдина

# Тәмле Яңы йыл

УДК 821.512.141-3-93
ББК 84 (2 Рос=Баш)-4
К 90

*Рәссамы Майя Зыяи*

**Кускилдина З. М.**
К 90 Тәмле Яңы йыл: хикәйәләр, әкиәттәр. — Өфө: Китап, 2010. — 104 бит.
ISBN 978-5-295-05145-6

«Тәмле Яңы йыл» — авторҙың икенсе китабы. Балалар матбуғатында тәжрибә туплаған әҙибәнең хикәйәләре, әкиәттәре бик мауыҡтырғыс: улар уҡыусыны ҡыҙыҡлы, мажаралы ваҡиғалары, тел байлығы менән йәлеп итә. Ҡыҫҡа ғына әҫәрҙәргә күп мәғлүмәт һалыныуы ла Зөлфиә Кускилдинаның ижадына мәртәбә өҫтәй.

**УДК 821.512.141-3-93**
**ТП — 156/10** **ББК 84 (2 Рос=Баш)-4**

**ISBN 978-5-295-05145-6**

© Кускилдина З. М., 2010
© Зыяи М. Л., һүрәттәр, 2010

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Хеҙмәт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Батыр Хәрефтәр батшалығында . . . . . . . . . . . 4
Оҙонҡул . . . . . . . . . . . . . . . . . . 6
Хикмәтле һаҡал . . . . . . . . . . . . 9
Әсәйҙең ҡанаты аҫтында . . . . 12
Сәғәт менән дуҫлашҡан ҡыҙ . 14
Урмандың көҙ нуры . . . . . . . . 15
Төймә — ҙур бүләк . . . . . . . . . 19
Кәзә бәрәстәре аш бешергән . . 20
Йомарт Ҡабан . . . . . . . . . . . . 23
Ҡышын бешкән еләк . . . . . . . 24
Икмәк валсығы . . . . . . . . . . . 27
Кәбеҫтә . . . . . . . . . . . . . . . . . 32
Тумыртҡа йыры . . . . . . . . . . . 35
Тәмле Яңы йыл . . . . . . . . . . . 36
Күңелдәге компас . . . . . . . . . . 38
Суртан диңгеҙгә китә . . . . . . . 40
Алтынайҙың ҡоймағы . . . . . . 42
Тылсымлы сәскә . . . . . . . . . . 45
Тунын һатҡан ҡуян . . . . . . . . 47
Моңдоң көсө . . . . . . . . . . . . . 48
Ала ҡарғаның һыйы . . . . . . . . 50
Күркә әҙәпкә өйрәнә . . . . . . . 52
Өйҙәге цирк . . . . . . . . . . . . . . 54
Ҡасҡан әйберҙәр . . . . . . . . . . 56
Өй туйы . . . . . . . . . . . . . . . . . 58
Икмәк көсө . . . . . . . . . . . . . . . 59
Аҫҡар нисек ҙур булған? . . . . 60
Йәшел ут йылмая . . . . . . . . . . 62
Морат эсендә тағы бер Морат . . . . . . . . . . . . . 63
Сәнскенең ҙур ағаһы . . . . . . . 65
Һабантуй һөлгөһө . . . . . . . . . 67
Атайымды яртыға бүләйек. . . . 69
Шәжәрә тәмлеме? . . . . . . . . . 70
Калуш-кәмә . . . . . . . . . . . . . . 72
Ҡунаҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . 74
Китап һөйләгән хикәйәт . . . . 76
Йәйғорло туп . . . . . . . . . . . . . 77
Ҡуян баҙарҙа бүре һатҡан . . . 80
Сыйырсыҡ илен тапты! . . . . . 82
Намыҫлы бүре . . . . . . . . . . . . 83
Баҡса һылыуҙары . . . . . . . . . . 85
Ҡанатлы төлкө . . . . . . . . . . . . 88
Атайым-атаҡайым . . . . . . . . 90
«Вундеркинд» . . . . . . . . . . . . 92
Бейеүсе кәнфит . . . . . . . . . . . 94
Ҡәҙерле ағас . . . . . . . . . . . . . . 96
Шуҡ, Шат менән Шымдың тәүге мажаралары . . . . . . . 98
Тоҙло малай менән Тоҙһоҙ малай . . . . . . . . . . 100

# Хеҙмәт

Ҡуян балаһы Оҙонғолаҡ уҡырға төштө. Оҙонғолаҡҡа әсәһе: «Улым, уҡыу — ул хеҙмәт», — тине. Оҙонғолаҡ хеҙмәттең нимә икәнен дуҫтарынан һорашырға булды. Тейен балаһы сәтләүек ярып ултыра ине. «Хеҙмәт ул — урмандан сәтләүек йыйыу», — тине. Айыу балаһы ҡурай еләге йыйып йөрөй ине. «Белгең килһә, хеҙмәт ул — ҡурай еләге үҫтереү», — тине. Ә Төлкө балаһы, сумкаһын аҫып, уҡырға китеп бара. Ул Оҙонғолаҡтың һорауына бик серле итеп: «Әлегә минең хеҙмәтем — уҡыу, — тип яуап бирҙе. — Белемле бөтә эште лә оҫта итеп эшләй».

Оҙонғолаҡ, өйҙәренә ҡайтып, китап уҡырға ултырҙы.

# Батыр Хәрефтәр батшалығында

Батырҙың исеме бик матур. Атаһы ла, әсәһе лә шулай, ти. Асия апаһына ла оҡшай был исем.

Исемен әйтеп өндәшһәләр, малайҙың ауыҙы үҙенән-үҙе йырыла. Уға шул тиклем рәхәт булып китә.

Батыр исемен яҙа белмәй әлегә. Бәләкәй әле. Ә шулай ҙа, хәрефтәрҙе өйрәнеп, исемен яҙғыһы килә.

Ҡағыҙ-ҡәләм тотоп, ул Хәрефтәр батшалығына китте. Бик кеселекле итеп һорағас, уны һаҡсылар Хәрефтәр батшалығының һарайына үткәреп ебәрҙе. Хатта Батшаның үҙенә үк оҙатып ҡуйҙылар. Ул, тәхеттән төшөп, төрлө хәрефтәре менән күңелле бейеү бейеп йөрөй икән. Шулай ҙа сит малайҙы шунда уҡ күреп ҡалды.

— Һаумы, улым, ни йомош? — тип һораны.

— Эй хөрмәтле Батшам! Миңә исемем эсендәге хәрефтәр кәрәк ине. Шуларҙы бирмәҫһеңме икән?

— Исемең нисек?

— Батыр.

— Юҡ шул, улым, хәрефтәрҙе мин былай ғына өләшә алмайым. Шартым бар: исемеңде аҡларға кәрәк!

Батырға «исемеңде аҡларға кәрәк» тигән һүҙҙәр һис тә аңлашылманы.

Аптырағас, ул:

— Хәҙер мин хәрефтәрҙе аҡ буяуға буяп сығам, — тине.

Батша ҡысҡырып көлөп ебәрҙе:

—Шартым улай еңел генә түгел шул. Һин миңә үҙеңдең нимәгә һәләтле булыуыңды күрһәтергә тейешһең! Исемең «Б» хәрефенән башлана. «Б»-ны алыр өсөн һиңә башыңды эшләтергә кәрәк. «Баш» һүҙенән ниндәй һүҙҙәр яһап була, мәҫәлән?

— «Башҡорт!» — тип сатнатып әйтеп бирҙе малай.

— Дөрөҫ. Һин — башҡорт малайы. «Б» хәрефе — һинеке.

— Хәҙер «А» хәрефенә күсәйек. Иң ҡәҙерле кешеңде әйт!

— Атайым.

— Бәләкәй булһаң да, аҡыллы икәнһең.

— Инде хәҙер «Т» -ға туҡталайыҡ. Йомаҡ ҡоям, яуабын таба алырһыңмы икән? Балдан татлы, майҙан йомшаҡ? Нимә был?

Һәй, Батырға әсәһе быңдай йомаҡты ҡойғаны бар бит инде. «Онотоп ҡуйма», — тип тә иҫкәрткәйне.

—Туған тел, Батша бабаҡайым!

—Һүҙҙәрең хаҡ! «Ы» -ға ла килеп еттек, һиңә барырға теләрме икән һуң ул? Бик тә шаян хәреф.

—Батша бабаҡайым, «Бат» тигән исем менән ҡайтып булмай бит, оятҡа ҡалдырма! Әйт шартыңды.

—Маймыл булып ырғы! Ысын маймыл булып ҡылан!

—Юҡ, мин мәймүн түгел. Мин ысын, ышаныслы кеше, — тине Батыр.

Батшаға малайҙың холҡо оҡшаны: «Бәләкәс булһа ла, үҙен үҙе яҡлай белә!»

«Ы» хәрефе лә Батырға барырға риза булды.

—Ә был шартым бик ҡатмарлы. «Р» хәрефе бик алыҫ йылы яҡтарҙағы Розарий тигән илгә Роза сәскәһен һаҡларға китте. Шунда барып ҡайтырға тура килер һиңә, — тине Батша хәйләкәр генә.

Батыр, самолётта бер тәүлек осоп, Розарий иленә барып төштө. «Р» хәрефе Розарий иленең баш һаҡсыһы икән.

Меңйәшәр аждаһа Розарий илен баҫып алырға һуғыш асҡан. Көрәш ҡыҙғандан-ҡыҙған.

Батыр, ысынлап та, батыр йөрәкле: баҫҡынсынан ҡурҡманы.

Аждаһа, Батырҙы танып:

— Мин һине беләм. Һин — башҡорт малайы. Һинең ата-бабаларыңды еңә алмайынса, йылы яҡтарға ҡасҡайным.

— Бик һәйбәт булған…

— Булмаған шул инде… Бында ла эҙләп таптың бит, —

тип ҡарт аждаһа утлы телен сығарҙы, оҙон ҡойроғон болғап ҡуйҙы.

— Мин «Р» хәрефен эҙләп килеп сыҡтым. Һинең миңә кәрәгең дә юҡ.

— Йә, алышып тормайыҡ инде, — тине башҡорт малайынан ҡурҡҡан аждаһа. — Мин ҡартайҙым, бик ҡартайҙым. Барыбер еңәсәкһең. «Р» менән үҙең һөйләшеп килеш.

«Р», әлбиттә, Батыр килгәнгә бик шатланды. Ҡарт аждаһа йоҡоға талғас, икәүләп Розарий илендәге бөтә розаларға тере һыу һибеп сыҡтылар. Сәскәләр, таждарын асып, хуш еҫ бөрктө. Уларҙың шул тиклем тәмле еҫенән ҡарт аждаһа йән бирҙе. Сөнки ул гел насар һауаны ғына һулап йәшәргә өйрәнгән, ти.

Батыр «Р» хәрефен дә Тыуған иленә алып ҡайтты. Хәрефтәр батшаһы быға бик шатланды. Батыр бына шулай итеп исемен яҙырға өйрәнде.

## Оҙонҡул

Борон хайуандар бик татыу йәшәгән. Бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөшөргә яратҡандар. Төрлө һый әҙерләп, ҡунаҡҡа саҡырышҡандар.

Ҡуяндар ҙа, бүреләр ҙә, айыуҙар ҙа, төлкөләр ҙә ғаиләләре менән дуҫ, ти.

Араларында татлы теле, ҡабарып торған ҡалын ҡойроғо менән төлкө айырылып торған.

Бик насар бер ғәҙәте булған уның. Ҡунаҡҡа барһа, шым ғына берәй нәмә сәлдерә лә ҡуя икән. Бер кем күрмәгәндә кеҫәһенә һала ла ала, имеш. Энә менән епкә тиклем урлаған.

Бер ваҡыт айыу хайуандарҙы үҙенә ҡунаҡҡа саҡырған. Ашатҡан, баллап сәй эсергән. Бейегәндәр, йырлағандар. Ҡунаҡтар киткәс, ҡараһа, өйөндә яратҡан көмөш бысағы юҡ. Эҙләп табалмағас, төлкөгә шик төшкән. Бик асыуланған, ти, айыу.

Урлашыуҙан төлкөнөң бер ҡулы көндән-көн оҙоная башлаған. Шул тиклем оҙонайған, йәнлектәрҙең иҫтәре киткән. Төлкө ҡайғыға ҡалған. Тик насар ғәҙәтен ташлай алмаған.

Бүренең тыуған көнөндә лә айыу төлкөнөң кеҫәһенә нәмәләр һалғанын күреп ҡалған.

— Әһә, тоттом! Оҙонҡул! Сәлдерәһеңме?! Хәҙер ҡулыңды ҡыҫҡартам! — тип айыу төлкөгә ташланған.

— Нимә һин? Аңһыҙ! Бына бит ҡойроғомдо тарарға торам, — тип кеҫәһенән тарағын сығарып күрһәткән төлкө.

Ләкин хәйләкәр был юлы ҡотола алмаған.

— Әйҙә, киттек өйөңә, — тигән айыу.

— Мин бит ҡунаҡҡа һине, айыу ағаҡайым, киләһе аҙнаға саҡырырға тора инем.

— Юҡ, минең бөгөн барғым килә.

Төлкөнөң айыуҙы өйөнә алып ҡайтмай сараһы ҡалмаған. Үҙегеҙ беләһегеҙ, бик көслө бит инде ул айыу: асыуланһа, тотоп тыйып булмай.

Ишектән инеү менән, ҡунаҡ өҫтәлдә үҙенең бысағын күреп ҡалған да:

— Әһә, бына минең бысағым! Оҙон ҡулыңды ҡыҫҡартам хәҙер, — тигән.

Төлкө бик ҡурҡҡан. Илаған. «Ҡабат урлашмайым», — тип ғәфү үтенгән.

Айыу уға шарт ҡуйған.

— Кемдән ниндәй әйбер сәлдерҙең, бөгөн үк таратып бир! — тигән. — Юҡһа минән ҡотолоу юҡ һиңә.

Төлкө йәнлектәрҙән урлаған нәмәләрҙе ҡысҡырып йырлай-йырлай тарата икән:

— Бүре, һин өйҙәме ул? Бына тарағың.

*Ҡабат әйбер сәлдермәйем,*
*Ҡыҫҡар, ҡулым, ҡыҫҡар, ҡулым!*
*Һин ҡыҫҡарһаң, оҙон ҡулым,*
*Уңып торор һәр саҡ юлым!*

Ҡуяндың өйөнә лә барып ингән төлкө:
— Ҡуян дуҫым, ал кишер ҡырғысыңды!

*Ҡабат әйбер сәлдермәйем,*
*Ҡыҫҡар, ҡулым, ҡыҫҡар, ҡулым!*
*Һин ҡыҫҡарһаң, оҙон ҡулым,*
*Уңып торор һәр саҡ юлым!*

Ҡуянға бик оҡшаған был йыр. Төлкөгә ҡушылып йырлап та ебәргән.

Төлкө бер көн йырлаған шул йырын, ике көн... Их, берәй нәмә сәлдергеһе килә лә бит, оҙон ҡулына ҡараһа, ҡыйын булып китә, ти.

Бер йыл буйы Төлкөнөң теленән төшмәгән был йыр. Шунда ғына оҙон ҡулы ҡыҫҡара башлаған, ти. Булыр-булыр, мин дә ышанам быға: сөнки йыр бысаҡтан көслөрәк бит ул.

## Хикмәтле һаҡал

Йәшәгән, ти, бер малай. Исемен әйтмәйем. Әйтһәм, уға бик ҡыйын булыр, тим. Ә, ғөмүмән, уға оҡшаған малайҙар бик күп донъяла.

Мәктәптә һуңғы ҡыңғырау шылтыраған. Ур-ра! Малайҙар, ҡыҙҙар ял итергә таралышҡан. Теге мин һеҙгә һөйләгән малай ғына телевизор алдына ултырып алған да шунан ҡуҙғалмаған. Көндәр буйы ҡараған. Беләһегеҙме, нимә булған унең менән? Оҙон һаҡал үҫеп сыҡҡан. Үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш бабайға әйләнгән дә ҡуйған был. Уны береһе лә танымаған. Хатта ата-әсәһе лә.

— Малайҙы Асылыкүл буйындағы бер Торна ғына юҡһынған. Малай тыуғас та, Торна уға тәпәй килтергәйне бит. Шунан малай тып-тып итеп атлап киткәйне.

Ана шул Торна малайҙың хәлен белергә килгән. Тупһаларынан үтһә, ни күрһен: креслола йәйелеп, үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш бабай телевизор ҡарап ултыра.

Торна ипләп кенә:

— И-искә-әндә-әр! — тигән.

*(Малайҙың исемен мин түгел, Торна әйтте. Ярай, үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш бабай үпкәләмәҫ әле.)*

Малай ишетмәгән. Телевизор тауышынан ҡолаҡтары һаңғыраулана башлаған.

Торна йән көсөнә сыңрап ебәргән:

— Искәндәр, тим! Һинме был?

— Мин! Мин! — тигән малай, Торнаның тауышына ҡыуанып.

Торна креслоға бөтөнләй йәбешеп ҡатҡан Искәндәрҙе урынынан ҡуптарып алған да, һаҡалынан суҡышына эләктереп, Асылыкүл буйына алып китергә уйлаған.

Ихатаға сығыуҙары булған, бер йәнлек үҙе бер ҡарыш, һаҡалы меңҡарыш бабайҙы күреүҙән ҡысҡырып өрөргә тотонған.

— Ҡурҡма! — тигән Торна. — Был бит — һинең Аҡтырнаҡ дуҫың.